*Лилиә ШӘРӘФЕТДИНОВА,*
*БДУ аспиранты*

# Башҡорт әҙәбиәтендә дәрүиш образы һәм уның рухи офоҡтары

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте Көнбайыш әҙәби системаһына йөҙ бора, шул йүнәлештә үҫеш ала. Ләкин илһам, һут биргән, милли һүҙ сәнғәтен бик күп поэтик образдар, тасуири саралар менән байытҡан, фәлсәфәүи аһәң һалған, структура-композиция өлкәһенә яңылыҡтар алып килгән Көнсығыш әҙәбиәтенең традициялары ла байтаҡ. Был традициялар әҫәрҙең композицияһында, тел-стиль үҙенсәлектәрендә, тасуири сараларҙа, һөйләү манераһында, йәғни поэтикаһында ғына сағылыш тапмай, ә образдар системаһына ла ҡағыла. Башҡорт әҙәбиәтендә мәғрип рухы менән һуғарылған дәрүиш образы ана шундайҙарҙан. Был образ тамыры менән суфыйсылыҡ тәғлимәтенә барып тоташа һәм хәҙерге әҙәбиәттә шул тасауыф тәғлимәтенең ҡайһы бер фәлсәфәүи ҡараштарын, рухын күҙалларға мөмкинлек бирә.

Суфыйсылыҡ тарихынан билдәле булыуынса, тасауыф тәриҡәте VII—VIII быуаттарҙа социаль һәм милек тигеҙһеҙлегенә ҡаршы йүнәлдерелгән мосолман аскетлығының сағылышы булараҡ барлыҡҡа килә. Аскетлыҡ күренеше йәмғиәттә хөкөм һөргән ҡомһоҙлоҡҡа, боҙоҡлоҡҡа, хәлифәт менән етәкселек иткәндәрҙең кәйеф-сафаға ҡоролған тормошона, зиннәт-байлыҡ артынан ҡыуыуға, Ҡөрьәндең әхлаҡи-этик нормаларынан тайпылыуға, ҡан ҡойошҡа ҡаршы социаль протест белдереү формаһын ала. “Аскетизм, маздакизм, манихейство (зороастризмдағы хөрәфәтселек), монашество һымаҡ күренештәр айырым кешеләр ҡулында байлыҡ тупланыуға, ер хужаларының байыуына ҡаршы протест белдереү ерлегендә барлыҡҡа килә” (1; 137). “Феодалдар тарафынан аяуһыҙ иҙелеп йәшәү урта быуат кешеләрен донъя рәхәтенән мәхрүм булырға, мөмкин булған һәр төрлө ләззәттән тыйылырға мәжбүр иткән. Һөҙөмтәлә, Көнсығыш илдәрендә дәрүишлек массовый төҫ ала, ҡалалар “әһле саффә” (“эскәмйә кешеләре”) исеме менән йөрөтөлә, торор ере, ашар аҙығы булмаған хәйерселәр, берәҙәктәр, ил ҡыҙырыусылар менән тула.

Ана шул тормош ауырлығына үҙеңде ихтыярһыҙ күнектереү һәм сыныҡтырыу, ас-яланғаслыҡҡа түҙем булыу дәрүиштәрҙе һәм “эскәмйә кешеләрен” йыш ҡына аскетизм идеяһын уртаҡлашыуға килтергән, уны яҡларға мәжбүр иткән” (16; 276).

“Ислам. Белешмә сүзлек” исемле хеҙмәттә дәрүишкә түбәндәгесә аңлатма бирелә. “Дәрүиш — суфыйҙар мәҙһәбе ағзаһы. Дәрүиштәр донъя ләззәттәренән һәм байлыҡтарынан ваз кисеп, тыйылып йәшәүселәр. Дәрүиштәрҙе фәкирҙәр тип тә йөрөтәләр, улар хәйер-саҙаҡаны ла бер көнлөк кенә алалар, артығын алыу уларҙың мәсләгенә ҡаршы килә” (8; 45). Дәрүиш суфый һүҙенең синонимы булараҡ та ҡулланыла. “Суфый һүҙе урынына бик күп башҡа синонимдарҙы ла ҡулланырға мөмкин: дәрүиш, ғәрип, заһид, мөрит, салиҡ, васил, ғашиҡ, ирән, ғариф, меҫкен, вәли”, — тип яҙа Ә.Сибғәтуллина (14; 281). “Иран, Төркиә, Урта Азия һәм Урал-Волга регионында дәрүиштәр мал-мөлкәте булмаған һәм хәйер һорау менән тамаҡ аҫраусы аскеттарға тап килә”, — тип билдәләй Ф.Ш.Сибәғәтов (15; 29). Ислам дине билдәләүенсә, был донъяла кеше ваҡытлыса ғына. Бында түҙгәне өсөн, үлгәс уны “теге донъя”ла мәңгелек рәхәтлек көтәсәк. Шуға күрә лә суфыйҙар дәрүишлекте камиллыҡҡа барыуҙың бер юлы тип тә ҡарай.

Ниндәй тәриҡәттә булыуҙарына ҡарамаҫтан, дәрүиштәр ике ҙур төркөмгә бүленә: 1) бер урындан икенсеһенә даими күсенеп йөрөүселәр. Улар хәйер һорау менән тамаҡ аҫраған; 2) “изге ҡарт” (шәйех, пир) етәкселегендә бер урында тупланып көн күреүселәр” (15; 29).

Әлбиттә, Урта Азияла, Иранда, Төркиәлә киң төҫ алған дәрүишселек күренешенә ҡарата төрлө мөнәсәбәт йәшәп килә. Берәүҙәр дәрүишселектә, дәрүиштәрҙә әхлаҡи сафлыҡҡа, илаһи камиллыҡҡа әйҙәгән, нәфсе ҡоллоғоноң бығауҙарын сисеп, Раббының рәхимлегенә ирешкән Алла ҡолдарын күрә, икенселәр уларҙы был илаһи берлек юлында сәйәхәт итеүҙе кәсепкә әйләндереп, мәкер-хәйләгә, алдау-ялғанға ҡоролған тормош алып барыусылар, дин һүҙҙәре менән әҙәмдәрҙең күңелен арбап, һәләкәткә этәреүселәр, кешелекте пассивлыҡҡа өндәүселәр тип тә ҡабул итә. Шуға ла рәсми төҫ алған тәуарихтарҙа (Хисаметдин Мөслими, “Тәуарихи Болғарийа”; Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорди, “Тәуарихи Болғарийа”; Ғәли Соҡорой, “Тәуарихи Болғарийа йәки Тәкриби Ғәри”), суфыйсылыҡ тәриҡәтенең формалашыуын, үҫеш юлын яҡтыртҡан, тарихи әһәмиәткә эйә ғилми хеҙмәттәрҙә (Бертельс Е.Э. Суфизм и суфийская литература. М.: Наука, 1965; Суфизм в контексте мусульманской культуры. М.: Наука, 1989; Тримингем Дж.С. Суфийские ордены в исламе. М.: Наука, 1989; Нуртазина Н.Д. Ислам в истории средневекового Казахстана. Алматы: “Фараб”, 2000; Шиммель Аннемари. Мир исламского мистицизма. М.: Алетейа, Энигма, 2000 һ.б.) дәрүиштәрҙең төрлө һыҙаттары һынландырыла, төрлө ракурстарҙа берсә ыңғай, берсә кире образ булараҡ кәүҙәләндерелә. Ләкин фактик материалдарға ла, тасуири сараларға ла бай, дөйөмләштереүгә лә, типиклаштырыуға ла һәләтле, образлы фекер йөрөтөүҙең иң сағыу үрнәктәрен

тыуҙырған һүҙ сәнғәтендә дәрүиштәрҙең, дәрүишселектең ҡабатланмаҫ образдары асылған, был күренештең ыңғай һәм кире сифаттары төрлө юҫыктан сығып характерланған. Урта Азияла хөкөм һөргән ислам дине, йәмғиәт һәм кеше яҙмышында тотҡан урыны, башҡорт халҡы араһында Бохаранан, Хиванан, Сәмәрҡәндтән ислам дине әһелдәре килеп, мосолманлыҡтың таралыуы мәсьәләләренә ҡағылған картиналарҙа суфыйсылыҡ тәғлимәте һәм тәриҡәте менән бәйле традициялар ҙа урын алған. Ул берсә образдар системаһында, берсә әҫәрҙең фәлсәфәүи концепцияһында, берсә сюжет ҡоролошонда, айырым коллизияларҙы һүрәтләүҙә сағыла. Ләкин суфыйсылыҡ тәғлимәте һәм тәриҡәте менән бәйле традициялар әҫәрҙең бөтә өлөшөндә лә һаҡланмай, ул бары эпизодик характерға эйә. Урта быуаттарҙа хөкөм һөргән мосолманлыҡ рухынан, дин тәғлимәтенән сығып, донъяны баҡыйға һәм фаниға, күренештәрҙе ваҡытлы һәм мәңгелеккә айырып, береһен түбәнһетеп, икенсеһен илаһилаштырып һүрәтләгән руханиҙар араһынан тасауыф тәриҡәтенә ҡараған, уның тәғлимәтен уртаҡлашҡан, үҙҙәренә миссионерҙар функцияһын алған дәрүиштәрҙе лә, суфыйҙарҙы ла осратырға мөмкин. Мәҫәлән, К.Мәргәндең башҡорт халҡының XVI быуат урталарындағы тормошкөнкүрешен сағылдырған, дүрт китаптан торған “Бөркөт ҡанаты” романында ла дәрүиштәр образы, йәшәү рәүеше, суфыйсылыҡ тәғлимәтенә ауаздаш идеяларҙы шәрехләгән картиналар урын алған. Ләкин дәрүиштәр — эпизодик персонаждар ғына, уларҙың ҡайһы берҙәре генә әҙәбиәттә герой кимәленә күтәрелә ала. Автор Әпҡәдир мулланың башҡорт ерҙәренә нисек килеп эләгеү тарихын бәйәнләгәндә, Ҡазан тормошон, ундағы атмосфераны бөтә тулылығында һүрәтләгәндә генә суфыйсылыҡ традициялары менән бәйле образдарға мөрәжәғәт итә. Был, беренсенән, әҙипкә тарихи хәл-тороштоң дөйөм панорамаһын тыуҙырырға ярҙам итә, икенсенән, башҡорт ерҙәренә ислам диненең ни рәүешле таралыу юлдарына асыҡлыҡ индерә, өсөнсөнән, төрки халыҡтары мәҙәниәтендәге традицияларҙың синтезлашыу процесын һүрәтләүгә булышлыҡ итә.

Тамъян илендә тиҙ тамыр йәйеп ебәргәне, ят телдә ҡысҡырып-ҡысҡырып, көйләп-моңлап доғалар уҡығаны, йоҡо ятҡаны өсөн “Хөрәсән ялҡауы” тигән ҡушамат тағылған Әпҡәдир яҙмышында шәйех Әхмәт әл-Сәмәрҡәнди менән осрашыу хәл иткес роль уйнай. Ҡазанға Сәмәрҡәнд ҡалаһынан мәшһүр ғәрәп илсеһе Ибн Фаҙлан эҙе буйлап боронғо Болғар еренә изге ниәт менән килгән шәйех Әхмәт әл-Сәмәрҡәнди образында тәриҡәттәге рухи баҫҡыстарҙың иң юғары кимәленә күтәрелгән суфый-дәрүиш һынландырыла. Әпҡәдир яҙмышына асыҡлыҡ индереүсе эпизодик персонаж булыуға ҡарамаҫтан, автор уны ниндәйҙер бер йылылыҡ менән һүрәтләй, киләсәктә башҡорт ерҙәрендә тамыр йәйеп ебәрәсәк наҙан муллаларға поляр образ булараҡ кәүҙәләндерә. Дингә, хоҙайға, ғибәҙәт ҡылыуға бирелгәнлеге, йәшәү рәүеше, тәҡдире һәм тормош юлы менән шәйех Әхмәт ниндәйҙер кимәлдә батша булған еренән тәхетенән ваз кисеп, утын һатып йән аҫрар дәрүиш булып киткән Ибраһим ибн Әҙһәмде хәтерләтә. Ибраһим ибн Әҙһәм донъя

малынан, тормош рәхәтенән, тәхетенән ваз кискән, Алланы, аҙға ҡәнәғәт итеп йәшәүгә нигеҙләнгән тормошто яҡын күргән, Хоҙай бәндәһенә әйләнгән дәрүиш. Үҙенең йәшәү рәүеше, тормош принциптары менән суфыйҙарҙы табындырыр, өлгө булыр символик нишан кимәленә күтәрелгән заһид. Е.Э.Бертельс яҙыуынса, Бәлхәлә батша булған еренән, суфыйсылыҡ идеяларына бирелеп, физик хеҙмәтте байлыҡтан өҫтөн күреп, ғаиләһенән, тәхетенән баш тартҡан һәм ситкә китеп, ғүмеренең ахырынаса ярлылыҡта көн күргән әҙәм (5; 182—183). "Хикмәтле сәйерлек йәнә шунда, Ибраһим ибн Әҙһәм — суфыйҙар уйлап тапҡан һәм табынған хыялый бер дәрүиш нишаны ғына түгел, ул реаль тарихи шәхес" (2; 250). Ғалимдар раҫлауынса, Ибраһим ибн Әҙһәм Бәлхә иленән сыҡҡан һәм күп ғүмерен Сүриәлә йәшәп, 776—786 йылдар араһындағы бер яуҙа үлгән ғәрәп кешеһе (5; 183). Улар араһында бер ни тиклем айырмалыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, автор, әйтерһең дә, суфыйҙарҙы табындырыр байғош, үҙенсә бер символик нишанға әүерелгән Ибраһим ибн Әҙһәмдең художестволы образын тыуҙыра, легендар төҫ алған тарихи шәхестең рухи донъяһын реаль ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ картинала тасуирлай. "*Дингә, хоҙайға, ғибәҙәт эшенә фанатик рәүештә бирелгән йәш шәйех Әхмәт атаһы үлгәндән һуң малын мәҙрәсә файҙаһына бирҙе лә, үҙе ғәуам араһына сығып, Мөхәммәт пәйғәмбәр ҡушкан фарыздарҙы таратып йөрөргә ҡарар итте. Үҙен иҫке сәхәбәләр дәрәжәһендә күрергә теләй ине ул, ислам дине йоғонтоһона бирелмәгән мәжүсиҙәрҙе мосолман яһап, бөйөк хоҙайы алдында ҙур дәрәжә тураһында хыяллана ине*" (10; 33).

Роман биттәрендә дәрүиштәр берсә Ҡазан ҡапҡаһы эргәһендә халыҡҡа мауыҡтырғыс хикәйәттәр һөйләп кәсеп итеүсе һүҙ оҫталары, берсә ырыу-ҡәбилә малдарын талап, еңел тормош эҙләүсе берәҙәктәр булып та сығыш яһай. Ләкин уларҙы уртаҡ һыҙат берләштерә: беренсенән, бөтәһе лә бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөүҙе яҡын күргән мосафирҙар, икенсенән, ислам дине ҡанундары, тасауыф тәғлимәте хаҡында хәбәрҙар, өсөнсөнән, бөтәһе лә мәжүси халыҡтарҙы мосолманлаштырыуҙа әүҙем эшмәкәрлек алып барған руханиҙар.

Киң эпик полотнолы романда урын алған, эпизодик характерҙағы дәрүиштәр образы башҡорт халҡының XVI быуатта Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу мәлендәге социаль хәл-торошон, тормош-көнкүрешен, ышаныу һәм инаныуҙарын бөтә тулылығында һүрәтләү өсөн хеҙмәт итә, әҫәргә үҙенсәлекле этнографик колорит өҫтәй һәм эстетик зауыҡҡа, рухилыҡҡа бай суфыйсылыҡ тәғлимәтенең милли ерлектә ни рәүешле таралыуын, халыҡҡа, мәҙәни үҫешкә йоғонтоһон күҙалларға мөмкинлек бирә.

Әхиәр Хәкимовтың тарихи романдарында ла шулай уҡ дәрүиштәр образы менән осрашырға, уларҙың фекер йөрөтөү кимәле, эш-фиғелдәре, ижтимағи тормошта тотҡан урындары хаҡында аҙмы-күпме мәғлүмәт алырға, шул осорҙоң үҙенә генә хас нескәлектәре менән танышырға мөмкин. "Думбыра сыңы", "Һауыр ҡумта", "Дала моңо"

кеүек тарихи романдарҙа урта быуаттарҙағы хәл-ваҡиғалар эпик әҫәрҙәрҙең нигеҙен тәшкил итә һәм автор параллель рәүештә башҡорт халҡының ҡанлы-данлы тарихы, ҡайғы-хәсрәттәр, шатлыҡ-ҡыуаныстар, өмөт-инаныуҙар менән һуғарылған яҙмышын һүрәтләү менән бер рәттән, Урта Азия, дөйөм төрки халҡының ҡисмәтен дә, рухи һәм сәйәси хәлен дә шәрехләүҙе мөһим һанай. Был динамикала шул осорҙа бөтә төрки халҡының сәйәси һәм ижтимағи хәлен, шул быуат атмосфераһын күҙалларға мөмкинлек бирә.

Әхиәр Хәкимовтың тарихи романдары өсөн уртаҡ бер һыҙат хас. Телгә алынған романдарҙың төп геройы оло тормош тәжрибәһе туплау, башҡа милләт халҡының мәҙәниәте, әҙәбиәте, тарихы, көнкүреше йәки этнографияһы менән танышып, фекерләү офоҡтарын байытыу, юғарыраҡ бейеклектән үҙ халҡының яҙмышына ҡараш ташлап, объектив баһа биреү һәләтенә эйә булыу, ҡараңғы аңын яҡтыртыу, ысын хаҡлыҡ юлын өйрәтеү өсөн ғилем усағы тип иҫәпләнгән Урта Азия тарафтарына юл тота һәм ундағы әсе хәҡиҡәт, ауырлыҡтар, үҙ халҡына хас проблемалар менән осрашып, үҙе өсөн ҙур фәһем ала, сыныға, шәхес булып формалаша. Тарихтан билдәле булыуынса, Урта Азияла Алтын Урҙа ханлыҡтары хөкөм һөргән мәлдә суфыйсылыҡ тәриҡәтенең һәм илаһи ғишыҡ, мистик хис-тойғолар менән биҙәлгән тасауыф әҙәбиәтенең сәскә атҡан осоро була. Әхиәр Хәкимовтың романдарындағы хәл-ваҡиғалар, төп картиналар Алтын Урҙа хакимлыҡ иткән осорҙа бара. Шул данлы-шаулы йылдарҙың атмосфераһын реаль ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ итеп һүрәтләү, ул дәүерҙең тулы картинаһын бөтә тулылығында тыуҙырыу хәжәтенән ижтимағи һәм сәйәси тормошта әһәмиәтле роль уйнаған, йәмғиәттә әҙәп-әхлаҡ, мораль-этик нормаларҙы билдәләүсе кодексҡа әүерелгән, лирик нескәлек менән айырылып торған шиғриәткә һут биргән, һәләтле, хиссән, поэтик натуралы әҙиптәрҙе ижадҡа илһамландырған, фәһемле фекерҙәр донъяһын тыуҙырған суфыйсылыҡ тәғлимәтенә һәм тәриҡәтенә, төп тәртип-низамдарына, мәҙһәп менән етәкселек итеүсе шәйехтәр һәм тәриҡәттә сәйәхәт итеүсе дәрүиштәр образына ла туҡтала. Сөнки Урта Азия ислам дине киң таралған өлкәләрҙең береһе булараҡ билдәле һәм уның сиктәрендә формалашҡан, бик күп ҡанундарын уртаҡлашҡан суфыйсылыҡ мәҙһәптәре лә мәҙрәсәлә мөрит-эйәрсәндәрҙе тәрбиәләү, үҙҙәренә алмаш әҙерләү, ғилем-белем усаҡтарын ҡабыҙып ебәреү эше менән әүҙем шөғөлләнгән.

Тәүге тапҡыр дәрүиштәр образы менән “Думбыра сыңы” романында осрашабыҙ. Киң ҡарашлы, сая, үткер, сәсән телле Һабрауҙы ата-әсәһе, ырыуҙаштары, ғилем туплап, тыуған яҡтарына ҡайтып ғәзиз халҡының белемен ағартыр тигән ҙур өмөттәр бағлап, каруансыларға эйәртеп, Урта Азия яҡтарына уҡырға оҙата. Хәүефһеҙлек эҙләп каруанға эйәргән юламандар араһынан уға ҡәләндәр (илгиҙәр дәрүиштәр), дәрүиштәр, үҙе һымаҡ белем эҙләп сыҡҡан йәш егеттәр, әсирлектән ҡасҡан ҡолдар, каруан һағына һырығыусан төрлө айғаҡсын, шымсылар менән

осрашырға тура килә. Оҙаҡҡа һуҙылған сәфәрҙә хәлһеҙләнеп, әлһерәп, рухи яҡтан ярлыланып, физик яҡтан көсһөҙләнеп аяҡтан йығылған мәлдә, Алла бәндәһе булып йөрөгән дәрүиштәр ярҙамға килә, юлдаштарын яңғыҙлыҡта ҡалдырмай, рәхимлек һәм миһырбанлыҡ менән яуап ҡайтара. "*Был яктарҙа саратан тип йөрөтөлгән иң эҫе мәл ине. Һабрау ут бөркөп балкыған кояшта торомбаш кеүек карайҙы, ябыкты. Хәлһеҙләнеп йығылған сактары булды. Ярай әле, юлдаштары ташламаны уны. Ғүмерҙәрен хаклыкка, ғәҙеллеккә арнаған, әҙәм балаларын тоғролокка өйрәтеп йөрөгән дәрүиштәр бындай гонаһлы эште кыла алмай ине*" (17; 14). Романдың тәүге биттәрендә үк ғүмерҙәрен Илаһиға ғибәҙәт ҡылыуға бағышлаған, тоғролоҡта һәм ғәҙеллектә мөкәммәл, матди донъя менән бәйләнештәрен өҙгән, рухи камиллыҡҡа ынтылған дәрүиштәр образы, уларҙың йәшәү принциптары бәйән ителә, дөйөмләштерелгән характер һыҙаттары төҫмөрләнә. Автор уларҙы идеалистик күҙлектән генә сығып тасуирламай, ә уларға хас теләк-ынтылыштары, өмөт-хыялдары кеүек мәлдәргә лә туҡтала. "*Дөрөҫ, улар, кәрәк сакта тәкүәлектәрен онотоп, тереклек хакына урлашыуҙан да баш тартмай икән. Аҙашып йөрөгән малды һуйып ашаумы, эйәһе күрмәгәндә икмәк йә емеш-еләк эләктереп китеүме — улар өсөн бер ни ҙә түгел*" (17; 14—15). Әлбиттә, был суфыйсылыҡ тәғлимәтендә тыйыла, уның төп ҡанундарын боҙоу тип ҡарала, сөнки иблис ҡотҡоларына бирелгән мөрит тәриҡәттә аҙашҡан ҡол, оло хәҡиҡәттән мәхрүм йән эйәһе тип һанала. Тасауыф — иң беренсе сиратта күңел тәрбиәһе ул. Нәфсегә хужа булыу, материаль күренештәр менән бәйләнеште өҙөү, рухи донъяңды изге ғәмәлдәр менән байытыу, күңелеңде сафлау, паклау, камиллыҡҡа ынтылыу уның нигеҙ ташын тәшкил итә. Әҙиптең дәрүиштәр тормошондағы ошо моментҡа туҡталыуына үҙенсәлекле идея һалынған. Дәрүишселек араһында ошондай характерҙағы "сәйәхәтселәр" булыуын, маҡсаттарына тоғро ҡала алмаған заһидтарҙың яңылыш юлға баҫыуын автор илдәге әсе хәҡиҡәт, ауыр социаль шарттар, ҡатмарлы сәйәси, иҡтисади хәл менән аңлата. Теләнселәү, уғрылыҡ юлына баҫыу, тереклек өсөн көрәш алып барыу, уның өсөн бөтә алымдар ҙа ҡулайлы, тип һанау һуғыш йылдары өсөн типик күренеш.

Әхиәр Хәкимов дәрүиштәрҙең йәшәү принциптарын тасуирлау менән бер рәттән, серлелеге, сафлығы, ескерһеҙлеге, байлығы менән арбаған рухи донъяларына ла мөрәжәғәт итә, улар араһында аскетик идеяларҙы уртаҡлашҡан суфыйҙар менән бергә данлыҡлы мәҙрәсәләрҙә уҡыған, бөйөк фәйләсуфтарҙың тәғлимәтен үҙләштергән ғилем эйәләре булыуына ла әһәмиәт бирә. "*Һабрауҙың юлдаштары араһында ғәрәптәр ҙә, иранлылар ҙа, төрки һарттар ҙа бар ине. Ил гиҙеп, шәрек мәмләкәттәрен иңенә-буйына йөрөп сыккан дәрүиштәр теләһә ниндәй телдә иркен һөйләшә. Араларында данлыклы мәҙрәсәләрҙә укыған, бөйөк фәйләсуфтарҙың тәғлимәтен үҙләштергән ғилем эйәләре лә бар. Телдәренең айышына төшөнөп алғас, Һабрау уларҙың әңгәмәләрен йотлоғоп тыңланы. Белемгә һыуһаған һиҙгер күңеле һәр яңылыкты, юлдаштары ауыҙынан ишеткән*

*дастандарҙы, ғибрәтле риүәйәттәрҙе, һыу йотҡан ҡош кеүек, һеңдерә барҙы*" (17; 15).

Дәрүиштәр — улар хәйер-саҙаҡа һоранып йөрөгән берәҙәктәр генә түгел, ә халыҡҡа ғилем серҙәре таратҡан аҡыл эйәләре лә. Тән вә йән сафлығы, намыҫлы йәшәү, шәхес, выждан, аҡыл һәм иман менән ғүмер һөрөү кеүек гуманистик идеяларҙы алға һөрөүсе суфыйсылыҡ тәғлимәте белемдең, уның серҙәренә төшөнөүҙең кеше яҙмышында хәл иткес роль уйнаусы фактор икәнен яҡшы төшөнә, шуға ла мөриттәрҙе тәрбиәләгәндә заһир һәм батин донъя хаҡында ғилем туплауға мөһим урын бирелә. Танып белеү — тасауыф тәғлимәтенең тәү шарты. Шуға ла мәжлестәрҙә, йыйындарҙа ғилем донъяһының бөтә өлкәләре хаҡында, традициялары һәм яңылыҡтары, асыштар тураһында иркен һүҙ йөрөтөү суфый шәйехтәре өсөн хас күренеш. Тәү ҡарашҡа торор ере, ашар аҙығы булмаған хәйерселәр, берәҙәктәр, ил ҡыҙырыусылар һымаҡ ҡабул ителгән илгиҙәр дәрүиштәр йыраҡ араларҙы яҡынайтып, ят ерҙәрҙе үҙ итеп төрлө тарафтарҙа белем усаҡтары ҡабыҙып ебәргән, күңелгә фән донъяһына ҡыҙыҡһыныу саҡҡыһы һалып, белемгә сарсау уятҡан. Нәҡ суфый-дәрүиштәр эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә тасауыфса мистика менән һуғарылған героик-романтик характерҙағы дастандар һәм ҡиссалар, тәрән фәлсәфәүи йөкмәткегә эйә хикмәттәр, фольклор элементтарына бай өгөт-нәсихәттәр, илаһи ғишыҡ мотивына ҡоролған ғәзәл һәм робағиҙар ауыр замандарҙа халыҡтың болоҡһоу күңеленә йәм өҫтәүсе, илһам нуры менән яҡтыртыусы шишмәгә әүерелә һәм төрлө халыҡтар араһында һүҙ сәнғәтенең, художестволы фекер йөрөтөүҙең үҫешенә киң ижади мөмкинлектәр аса. Төрки ерлегенән сыҡҡан хиссән әҙиптәр ошо сюжеттарға таянып, нәзирә алымын оҫта ҡулланып, уға милли колорит өҫтәп, милли рух, аһәң менән һуғарып, үҙ ерлегендәге проблемаларҙы бәйәнләгән гәүһәрҙәр ижад иткән. Улар тасауыф тәғлимәтенең төп ҡанундарын шәрехләүгә ҡоролған күсмә сюжеттарҙың киң халыҡ массалары араһында таралыуына булышлыҡ иткән, ә белем усағын тәшкил иткән мәҙрәсәләрҙә шәкерттәрҙең һәм мөриттәрҙең төп уҡыу әсбабына әүерелгән. Киң фекер йөрөтөүгә һәләтле суфый-дәрүиштең юлаусыларға ғибрәтле риүәйәттәр һөйләүе, мажаралы сюжетҡа ҡоролған, әммә тасауыф символикаһы менән байытылып, суфыйсылыҡтың мораль-этик нормаларын бәйән итеүгә нигеҙләнгән дастандар көйләүе — мәҙһәп тарихы өсөн типик күренеш. "Тасауыфтың мистик өгөтө иһә, халыҡтың үҙ телендә алып барылғанлыҡтан, кеше аңына һәм күңеленә тиҙерәк юл тапҡан" (16; 276). Мәҙһәп тарихы менән бәйле мөһим фактты автор бәләкәй генә деталдәр аша кәүҙәләндерә һәм ҙур дөйөмләштереүҙәргә ирешә. Был авторҙың әҙәби мөмкинлектәрҙе киң файҙаланыуы, оҫта һәм урынлы ҡулланыуы, фактик материалдар менән виртуоздарса эш итеүе, тарихи ваҡиғалар тураһында киң мәғлүмәтле булыуы хаҡында һөйләй.

Оло шәхес булып формалашыуҙа хәл иткес роль уйнаған дәрүиштәргә Һабрау ҙа, ерле халыҡ та ихтирам менән ҡарай. "*Хәйер, был илдең*

*дин-хөрәфәттән башы әйләнеп бөткән мосолман халкы дәрүиштәрҙе изге һанай, барынса ашатып-эсереп ебәрә... Улай ҙа үҙен ауыр юлда юлдаш иткән, төрлө хәүеф-хәтәрҙән һаклаған, унан да бигерәк фекер саткыһы һалып, белемгә сарсауын уяткан дәрүиштәргә ул ғүмеренең аҙағынаса рәхмәт укыны*" (17; 16). Хатта айырылышыу мәлендә лә дәүерҙең хәтәр елдәрен үҙ иңендә татырға өлгөргән ас-яланғас егеткә суфый ярҙамға килә һәм киләсәктә һикәлтәле юлдар үтеп, ил ҡайғыһын хәстәрләүсе атаҡлы сәсәнгә әйләнәсәк Һабрау уларға ғүмер буйы рәхмәт уҡый. "*Сәмәркәндкә барып ингәндә, билбауға төйнәүле аксаһының һуңғы тиненәсә сарыфлап бөткәйне инде Һабрау. Ярай әле, юлдаштарының береһе ярҙам итте. Олоғайып килгән суфый ине ул. Егетте таныш мөдәрисенә хеҙмәтселеккә урынлаштырҙы*" (17; 16).

Автор суфыйсылыҡ тарихы, уның төп ҡанундары хаҡында ярайһы уҡ хәбәрҙарға оҡшай, сөнки Һабрау яҙмышының ҡыҫҡа ғына бер сәхифәһенә әүерелгән дәрүиштәр менән осрашыу, аралашыу картинаһында илаһи ғишыҡ юлындағы сәйәхәтселәрҙең йәшәү рәүешен дә, тормош принциптарын да, үҙ-ара һәм тирә-яктағыларға мөнәсәбәтен дә, идеалдарын да, ижадҡа һәүәҫлектәрен дә бөтә тулылығында асыуға өлгәшкән. Әхиәр Хәкимов уларҙы бары бер позициянан сығып ҡына баһаламай, ә төрлө яҡлап характерларға ынтыла, төрлө тормош коллизиялары аша художестволы образын тыуҙыра һәм был бигерәк тә тасаууыфтың нигеҙ таштарының береһен тәшкил иткән аскетик һәм мистик идеалдар хаҡында һүҙ йөрөткәндә киң сағыла. Әлбиттә, ярым мәжүси, ярым ислам дине йоғонтоһонда тәрбиәләнгән Һабрау өсөн был идеялар ят һәм күңелендә хатта ризаһыҙлыҡ тойғоһо уята. "*Тик бер нимәгә ризалашманы ярым мәжүси егет. Ни хакта һөйләмәһендәр, дәрүиштәр эште "теге донъяға" калдыра. "Фани донъя"ның көйөнөстәре лә, һөйөнөстәре лә — алдаусы төш, уҙғынсы ел, имеш. Хоҙай биргәнгә шөкөр кылып йәшәргә кәрәк. Байлык, зиннәт-ниғмәт, золом, юклык — бөтәһе лә үтеп китәсәк. Көслөгә каршы көсәнмә, үсле менән үсләшмә*" (17; 15). Был юлдар дәрүишселек араһында пессимистик хис-тойғолар һөрөмө менән һуғарылған аскетик идеяларҙың көслө булыуына ишаралай. Әлбиттә, шәхес азатлығы өсөн көрәшкә түгел, а пассив көнитмешкә өндәй был юлдар һәм йәмғиәттәге социаль тигеҙһеҙлеккә, феодалдарҙың зиннәт-ниғмәткә мансылған тормоштарына протест ауазы булып та яңғырай. Йәшәйеш шарттары, йәмғиәттәге ауыр иҡтисади хәл, хакимлыҡ итеүсе ҡатламдарҙың ябай халыҡты бөлгөнлөккә этәргән аяуһыҙ сәйәсәте түбән ҡатлам вәкилдәрен ошондай аҙымға барырға мәжбүр иткән, үҙенсәлекле протестҡа әүерелгән. Әммә быңдай алым һәм фәлсәфә һәр саҡ рухи азатлыҡҡа, шәхес, ил ireklegenә ынтылған, әленән-әле утлы, ҡанлы-данлы яуҙарға күтәрелгән башҡорт халҡы өсөн ят күренеш.

Шулай итеп, Әхиәр Хәкимов халыҡтың тарихын, йәмғиәт үҫешендә булып үткән ваҡиғаларҙы, ҡаршылыҡтарҙы, төрлө ҡәбиләләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен, бәрелеш-яуҙарын, сәбәп-һөҙөмтәләрен тасуирлаған киң эпик полотнола күҙгә әллә ни һалынып бармаҫ бәләкәй генә эпизодта иж-

тимағи тормошта, мәҙәниәттә һәм әҙәбиәттә тәрән эҙ ҡалдырған суфыйсылыҡ тәғлимәте, уның төп концепцияһы хаҡында ла һүҙ йөрөтә һәм дәрүиштәр тормошо, суфый образдары аша художестволы кәүҙәләндерә. Улар Урта Азияла Алтын Урҙа осоронда хөкөм һөргән атмосфераны тыуҙырыусы эпизодик персонаждар булып ҡына сығыш яһаһалар ҙа, нәҡ сәсән күңелле Һабрауҙың киләсәк яҙмышына көслө йоғонто яһаусы факторға әйләнәләр. Әлбиттә, автор уларҙың дөйөмләштерелгән образын тыуҙырған, шуға ла бер мосафирҙың да исеме, атамаһы юҡ. Автор улар хаҡында шәрехләгәндә бары абстракт рәүештә йә «суфый бер ҡарт», йә «дәрүиш», йә архаистик һүҙ ҡатламына ҡараған, ләкин шул уҡ мәғәнә түҫмөрләгәнә эйә «ҡәләндәр» тип телгә ала. Был ниндәй ҙә булһа конкрет дәрүиште, суфыйҙы түгел, ә дөйөм суфыйсылыҡ тарихы, уның төҙөлөшө, йәшәү рәүеше, идеалдары хаҡында объектив күҙлектән сығып һүрәтләү хаҡында һөйләй. Әҙип ҡулланған тел-стиль саралары ла, архаистик стилгә хас хикәйәләү манераһы ла шул осор рухын тыуҙырыу өсөн хеҙмәт итә.

Көнсығышта, Урта Азияла, Урал-Волга регионында киң төҫ алған, ижтимағи тормоштоң бөтә өлкәләрендә лә үҙенсәлекле сағылыш тапҡан, һүҙ сәнғәтенең үҫешенә киң офоҡтар асҡан суфыйсылыҡ тәғлимәтенең һәм тәриҡәтенең, мөрит һәм мөршидтәрҙең аныҡыраҡ картинаһын Әхиәр Хәкимовтың  “Дала моңо” романында осратырға мөмкин. “Дала моңо”н тәүге тарихи романдың дауамы тип ҡараһаң да хата булмаҫтыр, моғайын. Уларҙы бер үк мөхит, дәүер, сюжет, композиция берләштерә. “Думбыра сыңы”нда ла, “Дала моңо”нда ла хәл-ваҡиғалар Алтын Урҙа осоронда бара һәм ил, халыҡ яҙмышы, уның именлеге, хәүефһеҙлеге, киләсәге кеүек проблемалар менән бер рәттән, поэтик натуралы геройҙың трагик ҡисмәте лә бәйән ителә. Киң эпик полотнолы “Дала моңо”нда хәл-ваҡиғалар хиссән натуралы әҙиптең бөйөк һүҙ оҫтаһы булып формалашыу юлы, рухи үҫеш баҫҡыстары һәм ил, халыҡ яҙмышы кеүек проблемалар тирәләй үҫтерелә. Хакимлыҡ иткән хан тарафынан эҙәрлекләнеп, рухи яҡтан кәмһетелгән, тапалған, тереклек хәстәре утында янған, йән вә тән ғазаптары кисергән, ауыр саҡтарҙа күңелен яҙышыуҙы туҡтатырға, ижади эшмәкәрлек менән башҡаса шөғөлләнмәҫкә тигән шомло фекерҙәр ялмаған мәлдә, ғүмер уртаһына еткән Сәйфетдингә суфый-шәйех кимәленә күтәрелгән Абрар дәрүиш ярҙамға килә, илаһиәт нурына мансылған әҙәби тәриҡәттә юлын дауам итергә рухи көс өҫтәй. “Думбыра сыңы” романында йор телле, үткер зиһенле, сая рухлы Һабрау сәсән яҙмышында хәл иткес роль уйнаған абстракт характерҙағы илгиҙәр дәрүиштәр образы тыуҙырылһа, “Дала моңо”нда дәрүиштең конкрет образы бирелә, ҡылыҡфиғеле, эшмәкәрлеге, халыҡ менән үҙ-ара мөнәсәбәте, фекер йөрөтөүе аша характер һыҙаттары асыла. Әгәр ҙә тәүге романда бары тәриҡәттә сәйәхәт итеүсе дәрүиштәр мөхите хаҡында ғына һүҙ барһа, уларҙың йәшәү принциптары, тәриҡәттең нигеҙен тәшкил иткән төп ҡанундары художестволы кәүҙәләнеш тапһа, “Дала моңо”нда шәриғәт, тәриҡәт,

мәғрифәт һәм хәҡиҡәт кеүек рухи баҫҡыстарға ирешкән, башҡаларға бөтә барлығы, эше, һүҙе менән үрнәк булған мәҙһәп етәксеһенең образы тыуҙырыла. Суфыйсылыҡ тәриҡәтендә уңыштарға өлгәшеүҙе, Аллаға яҡынайыуҙы суфый бер үҙе, бер яңғыҙы ғына таба алмай, бының өсөн рухи етәксенең булыуы мәжбүри. Етәксе йәки шәйех тасауыфта рухи баҫҡысты хәтерләтә, башҡалар (мөрит-эйәрсәндәр) уға таянып юғары күтәреләләр, үҙҙәре шәм һымаҡ янһалар ҙа, "тәриҡәттә сәйәхәтселәр"-ҙең юлын яҡтыртыусы һәм илаһи берлек мәҙһәбенә кергәндәрҙең күңел күҙҙәрен асыусы остаз булараҡ сығыш яһай. Суфый шәйехтәренә хас ошо сифаттарҙың барыһы ла Абрар дәрүиш образында художестволы сағылыш таба.

Абрар — суфыйҙар мәҙһәбенең Сарай ҡалаһындағы шәйехе. Үҙ тирәһенә байтаҡ тарафдарҙар йыйған, йәштәрҙе уҡыу-яҙыуға өйрәтә, тәриҡәт юлына, шәриғәткә йөгөндөрә. Күп йылдар дауамында ханакала[1], дәрүиштәрҙең аулаҡ ҡөжрәһендә йәшәү йәмен, тәмен, тормош мәғәнәһен юғалтҡандар уның менән хәсрәттәрен бүлешеп, йәненә таяныс һәм дауа таба. Был суфыйҙың нескә психолог булыуына ишаралай, сөнки нәҡ тасауыф барлыҡҡа килеү мәленән үк кеше күңелендәге кисерештәрҙе, хис-тойғоларҙы, йәшертен эшләнгән аҙымдарҙы, мотивтарҙы, һәр бер индивидтың рухи асылын тәрән анализлауға йүнәлтелгән. Яуыз түрәләрҙе фашлаған шиғырҙары, биш-алты нөсхә итеп күсереп алған диваны өсөн хандар тарафынан эҙәрлекләнгән Сәйфетдин ярлыҡауҙы дәрүиш ҡөжрәһендә таба. Автор ҡарт дәрүиш Абрарҙың тормош юлына бәләкәй генә байҡау яһай һәм диалогтарҙа уның йәшәү позицияһын сағылдыра, характер һыҙаттарын, әхлаҡ принциптарын ғәҙәти тормош картинаһында психологик тәрәнлектә һынландыра. "*Йәшлегендә Бағдад, Ҡаһирә мәҙрәсәләрендә укып, мәшһүр ғалимдар, әҙиптәр менән аралашып, Абрар үҙе лә төрлө яклап белемле акыл эйәһе булып танылған. Бының өҫтөнә уға күп илдәрҙе күрергә, ике тапкыр хаж кылырға насип иткән*" (18; 270), — тип, уның киң ҡарашлы аҡыл эйәһе булыуына баҫым яһай автор. "*Шағир уның күпте белеүенә, зиһене асыклығына һокланһа, дәрүиш:*

*— Мәғлүм ки, яткан таш мүкләнә, йөрөгәне шымара, — тип йылмая. Мәгәр был сәфәрҙәрҙең һөйөнөсө генә түгел, көйөнөсө лә бар. Йөрөйһөң,*

---

[1] Ханака — суфыйҙар тупланып йәшәй торған урын. Икенсе төрлө ханаканы тәккә, зәвия, аситанә, дәргяһ тип атайҙар. Ханакаға сит кешеләр керетелмәгән. Был йортта суфыйҙар рухи етәксе ҡарамағында ғибәҙәт ҡылғандар, зекер әйткәндәр, нәфселәрен тәрбиәләгәндәр, экстазға ирешкәндәр, вакханалияға бирелгәндәр, шулай уҡ камиллыҡҡа ирешеү серҙәренә өйрәнгәндәр. Икенсе төрлө ханака "мөйөш" мәғәнәһендә йөрөй. Бәләкәй ханакалар күберәк ҡала ситтәрендә, ауылдың тыныс урамдарында ҡоролған. Йәйәүле юлсылар төн ҡунырға ошо урындарҙа ҡалғандар, йыраҡ ерҙән килгән дәрүиштәрҙе бында ҡаршылағандар.

Әҙәбиәттә ханаканы символик рәүештә "мәйханә", "һумханә", "харабат" тип тә йөрөткәндәр (Сибгатуллина Ә. Суфичылык серләре. — Казан: "Матбугат йорты" нәшр., 1998. 286-сы бит; Ислам. Энциклопедический словарь. М.: Наука. Главная редакция восточной литературы, 1991. С. 272).

*күрәһең, һынайһың да, бәндәләрҙең яҙмышы тигеҙ түгеллегенә ныҡырак ышанаһың. Берәүҙәре тормош юлын һыбай үтә, икенселәре туҙан йотоп, сарсап-йонсоп йәйәү атлай*" (18; 270—271). Һәр мөьминде мал-мөлкәткә, тормошҡа әүрәүҙе ҡуйып, нәфсе-нисбәтен тыйып, ғүмерен баҡый донъяға ҡарап ҡороуын теләп вәғәз һәм нәсихәт һөйләр суфый ауыҙынан социаль мотив менән һуғарылған ҡараштарҙы ла ишетергә мөмкин. Был бигерәк тә ҡарт дәрүиштең шағирға әйткән өгөтөндә тағы ла сағыуыраҡ төҫ ала, милли һәм рухи азатлыҡҡа әйҙәгән оран булып яңғырай. "*Эй, шағир! Ниңә һаман китмәнең бынау уғрылар ояһынан? Күптән юлда булырға кәрәк ине бит һиңә. Аңларға ваҡыт: инсан өсөн яуызлыкка ҡаршы халыҡ менән бергә күтәрелеү ҡыйын түгел. Иң ауыры — яңғыҙ көрәшеү! Урҙа әһеле йәшәү менән үлем ыҙанында, яу асырлыҡ көсө юҡ. Ғәҙеллек, иман, әхлак аяк аҫтында*" (18; 271). Тормош менән бергә атлаған, йәмғиәттәге сәйәси, иҡтисади хәлде объектив баһалаған, Сарай тормошондағы бөтә хәлдәр хаҡында хәбәрҙар шәйех шәхес һәм ил азатлығына, социаль тигеҙһеҙлеккә ҡаршы яуға өндәгән һәм шул рухта эйәрсәндәр тәрбиәләгән оло яугир, шул уҡ ваҡытта хан хөкүмәтенә һәм сәйәсәтенә ҡаршы оппозицион характерҙағы хәрәкәт әҙерләгән етәксе булараҡ күҙ алдына баҫа. Суфыйсылыҡ тарихынан билдәле булыуынса, нәҡ аскетик идеяларҙы уртаҡлашҡан, хакимлыҡ итеүсе юғары ҡатлам вәкилдәре тарафынан кәмһетелгән ябай халыҡ тиҙ үҫеш алған социаль тигеҙһеҙлеккә ҡаршы ихтилалға күтәрелә. "Социаль-философик ағым булараҡ, урта быуаттарҙа суфыйсылыҡ күберәк феодаль тәртиптәргә ҡаршы оппозицион көстәргә теләктәш булды. Ҡала ярлыларының һәм һөнәрселәренең феодалдарға ҡаршы йүнәлдерелгән ризаһыҙлығы суфыйсылыҡ пәрҙәһенә төрөлдө", — тип яҙа был хаҡта тарихсы М.Иванов (7; 52). "Третий суфий-отшельник Абу Адр ар-Рахман Суфи, сидя в египетской Александрии, вел борьбу с правительством, а в 861 году оказал вооруженную помощь подошедшим к городу войскам Андалусии" (11; 88—89). Шулай итеп, суфыйҙар кәрәк саҡта яуға ла күтәрелер көстө тәшкил иткән.

Тимәк, берсә оло тормош тәжрибәһен туплаған, халыҡҡа һәр саҡ тура юл күрһәтергә әҙер аҡһаҡалды, берсә туҙан, хәсрәт йотоп, сарсап-йонсоп йәйәү атлаған халҡын берҙәмлеккә өндәп, шәхес азатлығы өсөн яуға күтәрер етәксене хәтерләткән, берсә демократик идеяларҙы таратыусы гуманист, илаһи берлек юлына әйҙәгән суфый шәйех булараҡ сығыш яһаған ҡарт дәрүиш образында ҡыуанған, һыҡтаған, өмөтләнгән, икеләнгән, хәҡиҡәт эҙләү юлында уңыштарға ла ирешкән, хаталанған да ер кешеһе образы, уның рухи донъяһы, психологик кисерештәре бөтә нескәлектәре менән художестволы кәүҙәләндерелә. Ләкин шул уҡ ваҡытта уның характерына диалектик ҡапма-ҡаршылыҡ хас. Бер ҡарағанда ул Сарай тормошондағы бөтә хәлдәрҙән хәбәрҙар, ил хәсрәте менән янған ер кешеһе, икенсе яҡтан, әҙәм баҡыйлыҡта ғына үҙ асылына ҡайта, илаһи мөхәббәт ярҙамында йыһан ҡапҡаһын асып, мәңгелек тормошҡа ирешеү мөмкинлеген тәкрарлаған суфый ҙа.

Абрар образын, унының характерын бөтә тулылығында һынландырыуға авторҙың теле һәм хикәйәләү стиле ярҙам итә. Суфыйсылыҡ тәғлимәтендә һәм тәриҡәтендә, мәҙһәптәрендә киң таралған, әүҙем ҡулланылышта иҫәпләнгән лексик берәмектәрҙе (дәрүиш, рубаб, най, тәриҡәт, шәриғәт, ханака, ҡөжрә һ.б.) урынлы һәм оҫта ҡулланыу, геройҙарҙың һөйләү манераһына шул осорға хас аһәң һалыу, архаистик характерҙағы һүҙҙәр менән семәрләнгән хикәйәләү стиленә мөрәжәғәт итеү суфыйсылыҡ мөхитен, Сарай тормошон бөтә тулылығында күҙалларға, шул дәүерҙә хөкөм һөргән атмосфераны тотоп алырға, художестволы әҫәр булыуға ҡарамаҫтан, реаль ысынбарлыҡтың картинаһын тыуҙырырға булышлыҡ итә.

“Дала моңо”ндағы суфый Абрарҙы, дәрүиштәр образы, уларҙың эшмәкәрлеген “Думбыра сыңы” романында хәрәкәт иткән, дөйөмләштерелгән формала һынландырылған ҡәләндәрҙең дауамы тип ҡараһаң да хата булмаç, моғайын. Әгәр ҙә тәүге романда дәрүиштәр торор ере, ашар аҙығы булмаған, ғүмерҙәре һәр саҡ сәфәрҙәрҙә уҙған берәҙәктәр булараҡ күҙ алдына баҫһа, “Дала моңо”нда хәл-ваҡиғалар билдәле бер урында — суфый ойошмаһы тирәһендә бара, улар менән остаз етәкселек итә һәм ғәрәп, фарсы телле әҙәбиәттең формалашыуында мөһим роль уйнаған суфыйсылыҡ әҙәбиәтенән өлгөләр бирелә. “Думбыра сыңы”нда данлыҡлы мәҙрәсәләрҙә уҡыған, бөйөк фәйләсуфтарҙың тәғлимәтен үҙләштергән, ял ваҡытында сәйәхәтселәрҙең күңелен ғибрәтле риүәйәттәр, дастандар менән арбар аҡыл эйәләренең дөйөм образы Абрар суфый образында конкретлаша, рухи эшмәкәрлегендә баҙыҡлана. “Дала моңо”нда телгә алынған хикмәтле ҡисса шул дастан-риүәйәттәрҙең дауамылыр, моғайын. Һөйкәлмә ваҡиға булараҡ романда урын алған ғибрәтле һәм хикмәтле ҡисса Сәйф Сараиҙың бөйөк шәхес булып формалашыуында хәл иткес роль уйнаған көс. Шиғриәт тураһында булмаһа ла, фәлсәфәүи тәрәнлеккә эйә ҡиссала Иран дәүләтенең данлыҡлы батшаһы Ануширван менән бәйле ваҡиға бәйән ителә. Шаһ ярандарын эйәртеп һунарға сыҡҡанда, ауыл ситендә туҡһан йәштәрҙәге ҡарттың сәтләүек ағасы ултыртып йөрөүенә тап була һәм быға бик ғәжәпләнә. “*Эй, аҡһаҡал, — ти уға, — сәтләүектән ауыҙ итер өсөн тағы нисә йыл йәшәргә уйлайһың? Сәтләүек ағасы егерме йылдан һуң ғына емеш бирә икән бит!*” *Ҡарт:* “*Улар ултырткайны — беҙ ашаныҡ, беҙ ултыртабыҙ — улар ашар*”, *— тип яуап ҡайтара, ҡулын тәүҙә мәғрип тарафына, унан мәшриҡҡа һуҙып*” (18; 273).

Ысынында, ҡарт дәрүиш Сәйфетдингә бөтөнләй ҡатнашы булмаған әйбер тураһында һөйләй кеүек, ләкин һөйләгәндәрҙең идеяһы фәйләсуф әл-Фарабиҙың “Артҡа боролоп ҡарап, үтмештән фәһем ал, алға ҡарап, юлыңдың юҫығын аныҡла” тигән мәҡәл-әйтемгә яҡын фекере аша шағирға төбәлгән. Бөгөн булмаһа, киләсәк быуын кешеләре шағирҙың алтын-көмөштәрҙән ҡимммәтерәк ғәзәл-ҡасидаларынан, дастандарынан йәндәренә дауа, күңелдәренә зауыҡ алыр тигән идеяны образлыраҡ яңғыратыу маҡсатынан сығып һөйкәлмә ваҡиғаны сюжет һыҙығына индереп ебәрә.

Был ҡисса шулай уҡ романдың төп геройы Сәйфетдиндең киләсәк яҙмышына асыҡлыҡ индереүсе, ижадының хәлен күҙалларға ярҙам итеүсе эпизод та. Бер үк ваҡытта үҙаллы художество әһәмиәтенә лә, эстетик “автономияға” ла эйә, шул уҡ ваҡытта ситләтелгән, образлы юл аша әҫәрҙең төп сюжет һыҙығы менән бәйләнештә йәшәгән хикмәтле ҡиссаның асылы, әйтергә теләгән идеяһы романдың эпилогында бигерәк тә көслө яңғырай. “*Үҙ заманының ғәрәсәтле дауылдары, дәһшәтле йәшендәре аша, ак еләнен елберәтеп, атлай ҙа атлай тынғыһыҙ шағир. Уның илем тип һыктаған йәне, тетрәнеүҙәре, илһамлы өмөт-хыялдары, осар коштар кеүек, беҙгә әйләнеп кайта. Һаумы, шағир!*” (18; 350).

Хикмәтле һүҙ һөйләүгә ҡоролған дидактик йөкмәткеле ҡиссалар, өгөт-нәсихәт менән һуғарылған хикмәттәр суфыйсылыҡ тәриҡәтендә һәм һүҙ сәнғәтендә киң урын алған күренеш. Халыҡ ынйылары өлгөләренә таянып ижад ителгән, ябай һөйләү стиленә ҡоролған, кинәйәле мәғәнә һалынып, тасауыфса мистика, өгөт-нәсихәт менән һуғарылған, героик-романтик рухтағы, ләкин ғибрәтле сюжетлы хикмәттәр һәм хикәйәттәр мосафир дәрүиштәрҙең фиҙакәр эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә киң географик ерлеккә таралған, официаль дин әһелдәренең ҡоро вәғәздәренән айырмалы рәүештә, кеше күңеленә тиҙерәк юл тапҡан, оҙағыраҡ һаҡланған һәм суфыйҙар мәжлесендә һөйләнер традицияға әүерелгән. Сәсмә формала ла, шиғри формала ла ижад ителгән, әҙәп-әхлаҡҡа өндәгән, мораль-этик проблемаларға бағышланған ҡисса-хикмәттәрҙең сағыу өлгөләрен Й.Руми, А.Джами, Сәғди һәм башҡалар тыуҙырған. Суфыйсылыҡ тәғлимәтенән һәм һүҙ сәнғәтенән килгән, ғибрәтле һүҙ һөйләүгә ҡоролған хикмәтле ҡиссалар бәйән итеү традицияһы “Дала моңо” романында ла һаҡлана һәм авторҙың әйтергә теләгән фекеренә асыҡлыҡтар индереү, тасауыф мөхитенең рухын һынландырыу функцияһын үтәй. Ғөмүмән, романдың структураһы ла, характер айышын, ысынбарлыҡ төҫмөрҙәрен һүрәтләүҙә ҡулланылған лирик башланғыс өҫтөнлөк иткән хикәйәләү стиле лә көнсығыш классикаһы традицияларынан килә һәм романда дөйөм мәғрип рухы өҫтөнлөк итә.

Әгәр ҙә Әхиәр Хәкимовтың романдарында суфыйҙар образы, дәрүишселек күренеше ыңғай позициянан сығып һүрәтләнһә, ижтимағи-сәйәси тормошҡа йоғонто яһаусы көс, ислам донъяһында халыҡ идеалдарына теләктәшлек белдереүсе йүнәлеш булараҡ һынландырылһа, автор уларҙың тормошон, үҙ-ара мөнәсәбәтен, тәртип-низамдарын, тәғлимәт менән бәйле ҡанундарын ниндәйҙер бер йылылыҡ менән тасуирлаһа, Мостай Кәримдең “Ай тотолған төндә” трагедияһында, халыҡ ижады ынйыларына ҡараған “Тау сере” риүәйәтендә дәрүиштәр кире образ булараҡ кәүҙәләндерелә. Мостай Кәримдең иҫке йолаларға ҡаршы сыҡҡан, иреккә, рухи азатлыҡҡа ынтылған ҡыйыу шәхестәрҙе һәм уларҙың ҡотолғоһоҙ һәләкәткә атлауҙарын, йола ҡануны ҡорбандарын тасуирлаған “Ай тотолған төндә” трагедияһында дәрүиш үҙен халыҡҡа пәйғәмбәр илсеһе, был фани донъяла бәндәләргә иман таратып йөрөүсе дин әһеле тип таныта.

“**Дәрүиш:** *Мин — Дәрүиш. Илдән илгә йөрөп, иман таратам. Байбисәгә илтсе мине, Диуана, аяк балтырҙарым талды, хәлем бөттө. Өс көн инде тары бөртөгөләй ризык ейгәнем юк*” (12; 356).

Суфыйсылыҡ тәғлимәтенә ярашлы, дәрүиш — ислам дине ҡанундарының ҡоло. Ул — мосафир, изге бәндә, уның изгелеге ислам динен таратыуҙан ғибәрәт. Ләкин трагедияла ул үҙе лә һиҙмәҫтән шул “изге юлда” йөрөп, тормоштан ситкә ташланып барыусы кеше. Шулай ҙа үҙен халыҡ алдында изге бер йән эйәһе тип танытырға теләй, изге юлда — иман таратыу юлында тырышлыҡ күрһәтә, телмәре лә дини һүҙҙәр менән бик ныҡ сыбарланған.

“**Дәрүиш:** *Мин — пәйғәмбәр илсеһе, байбисә. Пәйғәмбәрҙең изге кәбер ташын үҙ кулдарым менән һыйпап, зәмзәм коҙоғонан тамсы-тамсы һыу эсеп килгән әҙәммен мин. Был фани донъяла бәндәләргә иман таратыуҙан башка шөғөлөм юк минең*” (12; 358).

Ул даланың ҡырағай ҡанундарын ислам дине хаҡына инҡар иткән дә һымаҡ.

“**Дәрүиш:** *Ил ағалары, сак кына сабыр итегеҙсе. Мосафирҙың да бер кәлимә һүҙен тыңлағыҙ.*

**Өсөнсө аҡһаҡал:** *Йә, пәйғәмбәр илсеһе ни әйтер?*

**Дәрүиш:** *Уйлап эш итегеҙ, акһакалдар. Ун икеһе тулмаҫ үҫмер әле никах йәшенә инмәгән. Был изге канундарға һыя торған эш түгел. Уйлашығыҙ*” (12; 376).

Ырыу йолаларына ҡаршы сыҡһа ла, ул үҙ мәнфәғәттәренән сығып эш итә, дин кешеһе булып йөрөп, тормошта юғалып барған көнитмешен дауларға тотона, Шәфәкте эләктереү юлында Тәңкәбикәнең гонаһын да фаш итергә әҙер торған йыланға әүерелә.

“**Дәрүиш:** *Ҡәһәр һуккыры! Юк! Барыбер мин тигәнсә булыр. Тәңкәбикә минең ус төбөмдә. Теләһәм — асам, теләһәм — йомам (усын бер асып, бер йома)*” (12; 378).

Артабан изге булып ҡыланған, иман таратып йөрөгән Дәрүиш ғәмәлдә үҙе боҙоҡлоҡ һәм шом эйәһе, иманын иблискә һатҡан бер берәҙәк булып сыға. Был икенсе шаршау финалында барған бәрелештә асыҡлана. “Тәңкәбикәнең бынан утыҙ йылдар элекке гонаһы фашлана, Дәрүиш тә дин кешеһенән ер кешеһенә әйләнә”, — тип билдәләй В.Ш.Псәнчин (13; 101).

Пьесаның башында Дәрүиш дин кешеһе, изге бер йән эйәһе булараҡ хәрәкәт итһә, трагедияның аҙағына табан уның характерында ер кешеһенә хас сифаттарҙың, теләк-ынтылыштарҙың өҫтөнлөк итеүе, матди донъя ҡоло, уның ниғмәттәре һәм ләззәттәре өсөн йәнен, иманын һатыр иң түбән йән эйәһе булыуы асыҡлана. Шәфәкте үҙенә тартып алыр өсөн Тәңкәбикәнең оло гонаһына үҙ шаһитлығын файҙаланырға ла, бының өсөн әллә ниндәй яманлыҡтар ҡылырға ла әҙер.

“**Дәрүиш:** *Әхирәт ул бында, ер өҫтөндә. Шәфәкте тәү күргәс, мин тертләп киттем. Емешһеҙ ағас, балаһыҙ кош кеүек ғүмеремдең үтеп барғанын капыл хәтеремә төшөрҙө ул. Күктән ергә һөрҙө ул мине. Бакһаң,*

*ерҙең күпме ниғмәттәренән, ләззәттәренән мәхрүм булғанмын мин. Ҡыҫыр үткән ғүмерем өсөн үкенәм мин. Ләкин йәйге ҡояш байығанда ла янып байый. Эсемдә томаланып ҡалған ғәйрәтем, ҡанмаған танһыҡтарым тынғы бирмәй миңә. Ҡаным дау күтәрә. Мин күмелгән янар тау кеүекмен. Шәфәкте бир миңә. Бөгөн үк бир!*” (12; 397).

“Ул, баҡһаң, бары сапан бөркәнгән бер иблис, имеш. Ғазазил фәрештә нисек иблискә әүерелгән кеүек, ул диндар дәрүиштән, әлеге дин сапанын һалып, бер аҙға бәндәгә әйләнә. Уның эсендә утыҙ йыл йоҡлаған иблислек уяна, аллаяр үҙе аллаға ҡаршы баш ҡалҡыта. Тәңкәбикә эшләгән гонаһтары өсөн үкенһә, шуның әсе ҡоһорҙарын татыһа, Дәрүиш дин-иман тип, гонаһ эшләгәне өсөн үкенә” (3; 245—246), — тип яҙа был хаҡта ғалим Ғ.Хөсәйенов.

Дәрүиш ислам диненә төрөнгән, ҡара уй-ниәттәрен дин һөрөмөнә төрөп башҡарған иблис, зобаный заттарҙың иң зәһәрлеһе. “Әҙәбиәтебеҙҙең кире образдар галереяһында ул ҡабатланмаҫ берәгәйле тип дәрәжәһенә эйә”, — тип билдәләй Ғ.Хөсәйенов (3; 246).

“Тау сере” риүәйәтендә урын алған мосафир Мостай Кәримдең “Ай тотолған төндә” трагедияһындағы Дәрүиште хәтерләтә. Уларҙың ҡылыҡфиғелендә, йәшәү принциптарында уртаҡ һыҙаттар ҙа бар кеүек. Мосафир ҡарт үҙен “мин ил ҡыҙырып йөрөгән берәҙәк бер дәрүиш кенә түгел, бик алыҫтан, Әлхәссә тигән шәһәрҙән килгән бер суфый дәрүиш булам” тип таныштыра һәм артабан бәләкәйҙән суфыйсылыҡҡа бирелеүен, төрлө ғилемгә эйә булыуын, бик күп китаптар күсереп яҙырға тура килеүен, иҫке генә бер әсбаптың араһынан Яман соҡор эргәһендә барымтасылар алтын күмеп ҡалдырыуын хәбәр иткән һарғайып бөткән бер яҙыуға тап булыуын һәм хазина эҙләп башҡорт ерҙәренә килеүен бәйән итә. Суфыйсылыҡҡа, дәрүиш тормошона мөнәсәбәтен, уны бер ҡасан да өнәп бөтмәүен хикәйәләй. “*Мине был суфый тормошо бер ҡасан да мөрхәтһендермәне. Унан мин үҙем өсөн бер ниндәй ҙә йән аҙығы тапманым. Һәр сак мин ғибәҙәтхананан ҡасып китергә уҡталдым. Тик минең, мәсет ҡомағындай, ил өҫтөндә ас-яланғас бер дәрүиш булып та йөрөйһөм килмәне. Көндәрҙән бер көн әлеге серле яҙыу ҡулыма килеп эләкте, уйланым-уйланым да, минең өсөн күк ҡабаҡтары асылыу ошолор инде, тип бәхетемде ошо Яман соҡор ҡурғанынан килеп тапмаҡсы булдым*” (4; 416).

Трагедиялағы һәм риүәйәттәге мосафирҙар сабырлыҡты, ҡәнәғәтлекте бөтә байлығы, тип иҫәпләгән, матди донъя күренештәре менән бәйләнешен өҙгән, тормош хәстәрҙәрен Алланан килгән рәхмәт булараҡ ҡабул иткән, илаһи ғишыҡ юлында сәйәхәт иткән дәрүиштәрҙән йыраҡ торалар. Ике йөҙлөлөккә, алдау-ялғанға, мәкер-хәйләгә, гонаһ шомлоғона ҡоролған көнитмеш хас улар характерына. Хәл-ваҡиғаларҙың башҡорт милли ерлегендә барыуы, уларҙың тормош позицияһы, характерҙары, рухи донъялары, психологияһы Мостай Кәримдең “Ай тотолған төндә” трагедияһындағы Дәрүиш образын риүәйәттәге мосафир образы менән берләштерә. Дин сапанын ябынған иблистәрҙең

кешеләр араһына кереп оялауы, суфыйсылыҡ тәғлимәтен һәм ҡанундарын инҡар иткән, параллель рәүештә үҫешкән, дин телендә һөйләшеп, ижтимағи һәм мәҙәни тормошта хәүеф-хәтәр тыуҙырыусы көскә әүерелгән ағымдың аныҡ образдары тыуҙырылған, дөйөмләштереү һәм типиклаштырыу оҫта ҡулланылып, уның реаль һыҙаттары баҙыҡланған, дөйөм картинаһы тыуҙырылған. Ислам донъяһында типик күренешкә әүерелгән хәҡиҡәт берсә әҙәбиәттең донъя кимәлендәге үҫешен билдәләүсе трагедияла, берсә һүҙ сәнғәтенең шишмә башын тәшкил иткән фольклорҙа асыҡлана.

Зәйнәб Биишеваның лирик-психологик ағым да, күтәренке романтик яңғыраш та хас булған “Һөнәрсе һәм Өйрәнсек” хикәйәтендә ысын һөнәрсене, илаһи талант эйәһен, халыҡ көнкүрешенә бик кәрәк көршәктәр эшләүсене дәрүишкә тиңләү хас. Кеше хаҡында, уның тормоштағы урыны, тәртибе, әхлаҡи йөҙө тураһында тәрән фәлсәфәүи уйланыуҙарға ҡоролған хикәйәттә дәрүишкә тиңләнгән Һөнәрсе фани донъя менән бәйләнешен өҙгән, күңелен бөтөнләй дингә һалып, Алла бәндәһе булып йөрөгән мосафирҙан йыраҡ. Суфыйсылыҡ тәғлимәтендәге дәрүиш — Алла ҡоло булһа, хикәйәттәге Һөнәрсе — эстетик зауыҡ тыуҙырыусы хеҙмәт ҡоло. Һөнәрсе бер ҡасан да тынғылыҡ белмәүсе, һәр ваҡыт эҙләнеүсе һәм өйрәнеүсе, шуға ла көндән-көн оҫтара барған хеҙмәт кешеһен символлаштыра. Ләкин матди байлыҡ туплау, көршәкте нисек тә күберәк һатып файҙа керетеү менән генә шөғөлләнгән көнсөл Өйрәнсек уның халыҡҡа фиҙакәр эшмәкәрлегенә берсә ирония менән көлөп, берсә кәмһетеп ҡарай.

“— *Мин иҫән сакта белеп кал, — тип күпме ялынған. Ә ул — Өйрәнсек тәкәбберләнеп көлгән генә.*

*— Юk өсөн баш ватып, ғүмер kыҫkартырға мин алйотмо ни? — тигән. Улай ғына ла түгел, Һөнәрсене кешегә алйот, дәрүиш итеп күрһәтергә лә тырышkан хатта.*

*— Ҡарағыҙ инде анауы алйотто! Һыу көршәге яһау өсөн ул шул тиклем күҙ нурын түгеп ултыра бит, дәрүиш. Һыуҙы ни матур һауытkа һалдың ни ҙә, насар һауытkа һалдың ни. Һыуҙан барыбер алтын сыkмаҫ, — тип, үҙенсә фәлсәфә һатkан*” (6; 443—444).

Йәки: “— *Йәшәү өсөн эшләй белеү генә етмәүен тәки белмәй китте бит, ә! ...Дәрүиш булып йәшәне, дәрүиш булып үлде бит, байғош, ә, — тип, үҙенсә фәлсәфә һатkан*” (6; 450).

Әлбиттә, суфыйсылыҡтағы илаһи сифаттары һәм әхлағы менән биҙәлергә тырышҡан, ғүмерен Хаҡҡа һәм кешеләргә хеҙмәт итеүгә бағышлаған, нәфсе ҡотҡоларынан азат дәрүиш менән художестволы оҫталыҡҡа ынтылған Һөнәрсе араһында уртаҡ һыҙаттар ҙа бар һымаҡ. Йәшәү рәүеше, рухи донъяһы, тормош һәм йәшәйеш принциптары, матди байлыҡҡа мөнәсәбәте, эшенә тулыһынса бирелгәнлеге менән Һөнәрсе ниндәйҙер кимәлдә суфыйҙы, дәрүиште хәтерләтә, ҡайһы бер осраҡта аскетик идеяларға ауаздаш фекерҙәр ҙә әйтеп ҡуя.

“— *Тамаҡ нимә ул? — тип, күңелһеҙ генә ҡарыулаша тамам кәйефе боҙолған Һөнәрсе. — Тамаҡ ни ул үҙем менән бергә китер, бөтөр. Ә көршәктәр һаман йәшәп ҡалыр. Һаман хеҙмәт итер*” (6; 445—446).

Матди байлыҡ туплауға ҡарата кире мөнәсәбәт, үҙ эштәренә тулыһынса бирелгәнлек, йәшәү мәғәнәһен һәм йәмен үҙҙәренең эшмәкәрлектәренән табыу һәм бөтә ғүмерҙәрен юғары идеалдарға бағышлау Һөнәрсе менән дәрүиште берләштерә, ләкин уларҙың табыныу объекттары ғына башҡа: мосафирҙыҡы — илаһилыҡ дарьяһы, Һөнәрсенең — эстетик зауыҡ тыуҙырыусы сәнғәт донъяһы.

Һөнәрсене дәрүиш, диуанаға тиңләгәндә автор суфыйсылыҡтағы дәрүиште түгел, ә үҙ эшенә мөкиббән китеп, донъяуи нәмәләрҙе онотҡан ярлыны күҙ уңында тота, йәғни ул күсмә мәғәнәлә ҡулланыла. Дәрүиш һүҙе Һөнәрсенең үҙ эшенә тоғролоғон, фиҙакәрлеген билдәләүсе әҙәби деталь, ул төп геройҙың образын, характерын психолигик тәрәнлектә һәм бөтә тулылығында асып биреү өсөн хеҙмәт итә.

Шулай итеп, башҡорт әҙәбиәтендәге дәрүиш образына төрлө мәғәнә төҫмөрлөгө һалынған. Берсә ул суфыйсылыҡ тәриҡәтендә сәйәхәт иткән, донъянан ваз кисеп, ғүмерен ғибәҙәт ҡылыуға бағышлаған, гонаһлы эштәрҙән йөҙ сөйөп, Аллаға юл алған мосафирҙы, заһидты символлаштыра, берсә зобаный заттарҙың иң зәһәрен — сапан бөркәнгән иблисте кәүҙәләндерә, берсә үҙ маҡсатына, хеҙмәтенә тоғро ер кешеһен һынландыра. Әҫәрҙә дәрүиштең ниндәй функция үтәүе, ниндәй мәғәнә төҫмөрлөгөнә эйә булыуы, ниндәй идеяны раҫлауы — әҙиптең ижад хыялы менән бәйле. Ә ижад — ул ирекле ҡош. Ул төрлө офоҡтарға юл алыуы, яңынан-яңы образдарҙы, идеяларҙы бүләк итеүе мөмкин.

Бөгөнгө әҙәбиәттә ислам диненән, суфыйсылыҡ тәриҡәте менән бәйле тәғлимәттән, тасауыф һүҙ сәнғәтенән ингән ҡабатланмаҫ образдар бисап. Шулар араһынан дәрүиштәр образы әһәмиәткә эйә. Ғүмерҙәрен Илаһиға һәм кешеләргә хеҙмәт итеүгә бағышлаған, камиллыҡҡа ынтылған, инсафлығы, рухи байлығы менән айырылып торған, фанилыҡтағы матди күренештәр менән мауыҡмаған суфый-дәрүиш образы хәҙерге әҙәбиәттә йышыраҡ урын ала бара, иманын, әхлаҡи йөҙөн, намыҫын юғалтҡандар, иблис ҡотҡоһона бирелеп, донъя мәшәҡәттәренә батҡандар өсөн өлгө булып сығыш яһай. Әйтерһең дә, ул рухилыҡҡа әйҙәүсе, фанилыҡтан юғарыраҡ даирәнең барлығы хаҡында уйландырыусы, мәл һәм мәңгелек, ваҡыт тураһында уйланырға мәжбүр итеүсе образ. Башҡорт әҙәбиәтенә, башҡорт рухи даирәһенә инсафлыҡ, кешелеклелек, камиллыҡ, тән вә йән сафлығы кеүек гуманистик идеяларҙы алып инеүе, әҙәп-әхлаҡ, мораль-этик нормаларҙы билдәләүгә йоғонто яһауы, хәҙерге иҡтисади мөнәсәбәткә ҡоролған йәмғиәткә матди байлыҡтан өҫтөн рухилыҡ өлкәһе барлығы хаҡында набат һуғыуы, кеше ғүмеренең сикләнгәнлеге, ғәмәл һәм фәрештәр хаҡында уйланырға мәжбүр итеүе менән әһәмиәтле.

## Әҙәбиәт


1. Баимов Р.Н. Великие лики и литературные памятники Востока. Уфа: Гилем, 2005.

2. Башҡорт әҙәбиәте тарихы, I том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990.

3. Башҡорт әҙәбиәте тарихы, V том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993.

4. Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980.

5. Бертельс Е.Э. Суфизм и суфийская литература. М.: Наука. Главная редакция восточной литературы, 1965.

6. Биишева З. Әҫәрҙәр, дүрт томда, II том. Роман, повестар, хикәйәттәр, хикәйәләр. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981.

7. Иванов М.С. Очерки истории Ирана. М., 1952.

8. Ислам. Белешмә сүзлек. Казан: Татарстан китап нәшрияте, 1993.

9. Ислам. Энциклопедический словарь. М.: Наука. Главная редакция восточной литературы, 1991.

10. Кирәй Мәргән. Бөркөт ҡанаты. Роман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981.

11. Литература Востока в средние века. Ч.2. Издательство Московского государственного университета, 1970.

12. Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. III том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972.

13. Псәнчин В.Ш. Мостай Кәрим — һүҙ оҫтаһы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972.

14. Сибгатуллина Ә. Суфичылык серләре. Казан: “Матбугат йорты” нәшр., 1998.

15. Сибәғәтов Ф.Ш. Ислам (дин, әҙип, әҙәбиәт): Белешмә һүҙлек. Өфө: Ғилем, 2004.

16. Харисов Ә. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965.

17. Хәкимов Ә.Х. Һауыр ҡумта (һайланма әҫәрҙәр, 2-се китап): Романдар һәм повесть. Өфө: Китап, 2000.

18. Әхиәр Хәким. Дауылдан ҡотолоу юҡ. Романдар, повестар, хикәйәләр. Өфө: Китап, 2004.